


# ӘЛИФБА


А Б В Г
Ё Ж З И
М Н Ң О
Ҫ Т У Ү
Ч Ш Щ Ъ Ы

# ӘЛИФБА

Дүрт йыллыҡ башланғыс мәктәп
өсөн дәреслек

Башҡортостан Республикаһы
Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланды

14-се баҫма



Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ - 2010

УДК 372.416.2=512.141
ББК 74.2я71 (2 Рос=Баш)
Ғ 84



**Ғәлләмов А.А., Хисамитдинова Ф.Ғ., Атнағолова С.В.**

Ғ 84 Әлифба: Башҡорт мәктәптәре өсөн дәреслек. — 14-се баҫма. — Өфө: Китап, 2010. — Һүрәттәре менән 144 бит.

ISBN 978-5-295-04822-7

**УДК 372.416.2=512.141**
**ББК 74.2я71 (2 Рос=Баш)**

© Ғәлләмов А.А., Хисамитдинова Ф.Ғ., Атнағолова С.В., 2002
© Үҙгәрешле. Ғәлләмов А.А., Хисамитдинова Ф.Ғ., Атнағолова С.В., 2009
© Мөхтәруллин А.Р. һүрәттәре, 2009
© Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2010

**ТП — 001/010**

**ISBN 978-5-295-04822-7**

# Мәктәп юлында.

Бер кешеләй шатланып
Атлайбыҙ, берҙәм баҫып.
Ҡулға сәскәләр тотоп,
Иңгә сумкалар аҫып.

Көмөш телле ҡыңғырау
Саҡыра бөтәбеҙҙе.
Ишектәрен киң асып,
Мәктәптәр көтә беҙҙе.

(Сөләймән Муллабаев.)
































33












A a




Әә

# Оо





# Өө



# У у



# Y y



# Лл



| | |
|---|---|
| ал | ла |
| әл | лә |
| ол | ло |
| өл | лө |
| ул | лу |
| үл | лү |

| | |
|---|---|
| ал | а-ла |
| ул | о-ло |
| үл | ү-лә |

ләл-ләл

*

— Ал-ло!
— Ал-ло! Лә-лә!
— Ә-ә, Ал-ла.
□ ә-лә □!

| | |
|---|---|
| әл-лә | Лә-лә |
| ал-ло | лә-лә |






| | |
|---|---|
| — | ма |
| әм | мә |
| ом | мо |
| өм | мө |
| ум | му |
| үм | мү |

мал
мәл
мул
мә
әм-мә
ал-ма

Ал-ма, мә ал-ма.
Ал-ма ал-ма а-ла.
Ал-ма, ал-ма ал-ма.
Лә-лә, мә ал-ма.



# Нн





| | |
|---|---|
| ан | на |
| ән | нә |
| он | но |
| өн | нө |
| ун | ну |
| үн | нү |

| | |
|---|---|
| он | о-лон |
| өн | у-лан |
| ун | ү-лән |
| | на-на |
| | нә-мә |

**Ун ал-ма.**

Ал-ма, ал-ма ал!
Ал-ма-ла ун ал-ма.
Ал-ма, ун ал-ма ал-ма!

О-ло-но о-ло-ла!

# Йй

| | |
|---|---|
| ай | — |
| әй | йә |
| ой | йо |
| өй | йө |
| уй | — |
| — | йү |

йә
йә-нә
йәм
йөн
йо-ма
йүн

йәй
йөй
йә-йә
ө-йөм
Ләй-лә
лай-ла

ай-ай
ой-ой
май
ма-лай
нә-нәй
мә-мәй

Йо-ма нә-нәй йәй-мә йә-йә.

Ма-лай йә-йә а-ла.

*

— Ал-ло!
— Ал-ло, Ләй-лә!
— Ә-ә, нә-нәй.
— Ләй-лә, май ал.
— Йә, нә-нәй.








| | |
|---|---|
| ат | та |
| әт | тә |
| от | то |
| өт | тө |
| ут | ту |
| үт | тү |

| | |
|---|---|
| тал | та-на |
| тай | то-лом |
| төн | то-ман |
| тәм | тү-лә |
| тән | Ту-ла |
| тун | тәм-том |

а, у > т

а, у > та

| | |
|---|---|
| а-та | у-та |
| о-та | ү-тә |
| ө-тә | әй-тә |

а, у > тай

ө, ү > тә

А-тай ат то-та. Ма-лай йә-йә-нән а-та. Ал-ма тү-тәл у-тай. О-ла-тай тәм-том а-ла.

*

— А-тай!
— Ә!
— Ту-ла-ла тун ал.
— Йә, Лә-лә.
— Йә-нә тәм-том ал.
— Йә.
— □ә□-мәт!



# И и



| | |
|---|---|
| ит | ти |
| ил | ли |
| им | ми |
| ин | ни |

ил
ит
им
ин

мин
тин
На-ил
На-и-лә

и-мән
и-ман
и-нәй
и-нә




| | |
|---|---|
| ба | бә |
| бо | бө |
| бу | бү |
| — | би |

бал
бай
бәй
бил

ба-ла
бә-лә
бо-лан
бүл-мә

ба-бай
та-ба
бил-бау
бом-ба



бал-та
бил-мән
ба-нан

бәй-ләм
бай-тал
ба-лан

Ай-бу-лат
Би-би
Лә-би-бә

## Булат.

Бу-лат — бә-лә-□әй ма-лай. Ул бүл-мә-лә уй-най. Бу-лат и-ла-май.

## Банат.

Ба-нат та бә-лә-□әй. Әм-мә ул уй-на-май. Ул и-лай. Бу-лат:

— И-ла-ма, Ба-нат, мә ба-нан, — ти.





# Ыы





| |
|---|
| бы |
| ты |
| йы |
| лы |
| мы |
| ны |

| | | |
|---|---|---|
| был | бый-ма | ым |
| йыл | йы-лан | ым-ла |
| тын | ал-тын | ын-йы |
| тым | у-тын | Ын-йы |

| | |
|---|---|
| ул — улы | был — быны |
| ат — аты | ул — уны |

был-был — Был-был
ын-йы — Ын-йы
ал-тын — Ал-тын

| | | |
|---|---|---|
| ту-лы | ат-лы | был-бы-лым |
| у-лы | ал-ты | ал-ты-ным |

Йы-лан йы-лы, Май-мыл йы-лы

Йы-лан йы-лы йы-лы бу-ла.

Бы-йыл йәй йы-лы. Әб-йә-лил, Ын-йы, Булат бы-уа-ла □ыу и-нә.






| | |
|---|---|
| са | |
| сә | ас |
| со | ос |
| сө | өс |
| су | үс |
| сү | ә-тәс |
| сы | |
| си | |

| | |
|---|---|
| сал | ә-сәй |
| сәс | сө-сө |
| сос | ос-ло |
| сәй | о-са |
| сүл | а-са |

сә
со
> с

ә-сәй — и-нәй

ө-лә-сәй — нә-нәй

Әй, Ә-ни-сә, Ә-ни-сә,
Ә-ни-сә бын-□а ни-сә?

*

— Ал-ло! Са-мат!
— Ә-ә, Сә-лим! Сә-ләм.
— Са-мат, мин ба-лы□ тот-том. Ун □и-ло бу-ла.
— Нисә-нисә? Ун-мы?
— Ун, ы-сын, ә-сәй әй-тә.



# Ш ш





| |
|---|
| ша |
| шә |
| шо |
| шө |
| шу |
| шү |
| шы |
| ши |

| | | |
|---|---|---|
| шау | о-шо | баш |
| шәл | мы-шы | биш |
| шул | баш-ла | буш |
| шәм | ма-ши-на | аш |
| шат | буш-лай | таш |

ш — әл, әм

ба, а, та — ш

— Мин — Иш-бу-лат.
— Ә мин — Са-мат.
— Мин шат.
— Мин □ә шат.

Иш-бу-лат са-на шы-уа. Са-мат ми-ләш а-шай.

Ә-сә: — Ша-ми-лә, аш а-ша, — ти. Ша-ми-лә аш а-шай. Ул шат.

а-шá а-шá-ма

| ш | с |
|---|---|
| аш | ас |
| таш | тас |
| ша-ма | са-ма |



# Кк





| | | | |
|---|---|---|---|
| кә | көн | сәс-кә | күк |
| ки | көс | си-кә | кә-күк |
| кө | кис | ә-ки-әт | бәш-мәк |
| күк | кит | төл-кө | и-тәк |
| | көл | ө-кө | и-шәк |

## Күл буйы.

Күл бу-йы. Кә-мә килә. Кә-мә-лә Ка-мил, Ка-мал, Ка-ми-лә. Ка-мил иш-кәк и-шә. Ка-ми-лә көй көй-ләй. Күл бу-йы бик ты-ныс.

## Әкиәт.

Өкө, төл-кө, кә-күк и-шәк-кә ки-лә. И-шәк ик-мәк, сәк-сәк, бәш-мәк а-ша-та...



# Ҡҡ







| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ҡа | ҡә | ҡу | ҡо | ҡы | ҡи |

| | | |
|---|---|---|
| ҡаш | ал-ҡа | ба-лыҡ |
| ҡош | аҡ-ҡош | ҡа-лаҡ |
| ҡыш | аҡ-лан | ҡо-лаҡ |
| ҡул | тал-ҡан | та-баҡ |
| ҡыл | шал-ҡан | ҡай-маҡ |
| ҡат | таҡ-та | ҡу-наҡ |

И-лаҡ, и-лаҡ,
Йыл-ҡы ҡо-лаҡ.

**ҡ — к**

ҡа-ла — ки-лә
ҡә-ләм — кө-лә

## Уҡ атышыу.

Ҡа-сим, Ҡә-үи уҡ а-ты-ша-лар. Ҡә-үи — ҡу-наҡ ма-лай. Ул уҡ а-та ла шат-ла-на.

Таҡ-та ҡаҡ-ма, ҡа□-ҡа ҡаҡ,
Ҡа□-ҡа ҡаҡ-ма, тот-ҡа ҡаҡ!



# Рр



| | |
|---|---|
| ра | рә |
| ро | рө |
| ру | рү |
| ры | ри |

| | | |
|---|---|---|
| рам | у-рам | тор |
| рәт | ур-ман | төр |
| ра-йон | мо-рон | бар |
| ро-бот | бо-рон | бир |
| Рим | бө-рө | күр |

Ҡар-ҡар, ҡар-□а
Ба-шын тыҡ-ҡан ҡар-□а.

## р — л

| | |
|---|---|
| бар | бал |
| ба-ра | ба-ла |
| а-рыш | а-лыш |
| Рәй-сә | Ләй-сән |
| Рәй-лә | Ләй-лә |



## Ҡолон.

Кә-рим, а-на, көрт кө-рәй,
Көт-мө-рө лә у-ра-ла.
Ҡо-лон то-ра ҡу-ра-ла,
Ни уй-лай был ту-ра-ла?
Ҡо-лон әй-тә: «Күбә-ләк!
А-на, а-на, кү-бә-ләк!»
«Ҡар бөр-төк-тәр —
кү-бә-ләк,
Уй-най-мы әл-лә ә-бәк?» —
Ти Кә-рим, күк-кә ҡа-рай,
Ҡар у-ны аҡ-ҡа у-рай.

(Гөлназ Ҡотоева.)



# Һ һ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| һа | һә | һин | ал-һыу | Ал-һыу |
| һо | һө | һа-уа | ан-һат | Ил-һам |
| һу | һү | һыу | ҡай-һы | Ай-һы-лыу |
| һы | һи | һөт | йә-һәт | Көн-һы-лыу |

Һайт-һайт,
Һы-йыр-ҡа-йым, ҡайт-ҡайт!



## Танышыу.

— Мин Ал-һыу бу-лам. Ө-фө-лә то-рам.

— Ә мин Ай-һы-лыу. Был Ил-һам ҡус-тым. Ул бә-лә-кәй.

— Ни-сә йәш-тә?

— Өс йәш-тә. Ә мин ал-ты-ла.

— Ал-ты? Ми-□ә лә ал-ты йәш.

— Уй-на-йыҡ-мы?

— Уй-на-йыҡ.

| мин — һин — ул |
|---|



# Ç



| | |
|---|---|
| аç | ça |
| уç | çу |
| үç | çү |
| оç | çо |
| өç | çө |
| ыç | çы |
| иç | çи |

| | | |
|---|---|---|
| аç | у-çаҡ | а-лыç |
| өç | баç-ма | ба-лаç |
| иç | а-çыл | таç-та-мал |
| үç | оç-та | һа-йыç-ҡан |
| ыç | өç-тәл | ҡы-ça-ла |

Үçә-үçә А-çы-лым,
Үçә-үçә оç-та-ра.



## Төшкө аш.

Ур-та-ла өҫ-тәл. А-ҫыл-би-кә, Аҫ-ҡар, Ис-лам төш-кө аш а-шай. А-ҫыл-би-кә — та-ры ҡыҫ-ты-бы-йы, Аҫ-ҡар — май-лы ҡой-маҡ, Ислам ҡай-маҡ-лы бут-ҡа а-ша-ны.

**с — ҫ**

| | |
|---|---|
| өс | өҫ |
| ас | аҫ |
| у-саҡ | у-ҫаҡ |
| сәс-кә | ҡыҫ-ҡа |
| ас-ҡыс | ҡыҫ-ҡыс |

Аҫ-ма-лы баҫ-ма —
Нәҡ тә аҡ таҫ-ма.
Таҫ-ма-ны баҫ-ма
ти-мә,
Баҫ-ма-ны таҫ-ма
ти-мә.

(Динә Талхина.)



# П п





| | | |
|---|---|---|
| пар | а-пай | туп |
| пар-та | бә-пәй | күп |
| пыш-пыш | лу-па | тип |

**п — б**

| | |
|---|---|
| тап — та-ба | туп — ту-бым |
| төп — тө-бө | һап — һа-бы |

Ҡо-Ош а-пай, сыҡ, сыҡ!
Ҡы-уыҡ а-пай, кит, кит!

На-сип мал а-ша-та. У-лар шат-ла-на. А-ла һы-йыр:

— Му-у-у! — ти, му-йы-нын бо-роп. Ат:

— Иһа-һа! — тип һө-рән-ләй.

— Мә-ә-ә! — ти бә-рәс, ба-шын ба-ҫып.

Ә ни-мә пип-пип тип әй-тә?

Әсәй нимә эшләй?






| | | | |
|---|---|---|---|
| эш | бе-йеү | бә-леш | ши-шәм-бе |
| эл | ме-неү | бә-пес | шәм-бе |
| эт | се-беш | ме-йес | тәм-ле |



Ә-сә-йем ир-тә то-ра. Баш-та һы-йыр һа-уа. Шу-нан ме-йес-тә бә-леш бе-ше-рә. Бә-леш тәм-ле бу-ла. Мин у-ны тәм-ләп а-ша-йым. Ә-сә-йе-мә рә□-мәт әй-тәм. Ул шат-ла-на.

Малай нимә эшләй?



# У (уы) - Ү (үе)

| | |
|---|---|
| ау | уа |
| әү | үә |
| ыу | уы |
| оу | |
| өү | |
| еү | |

| | | |
|---|---|---|
| ау | а-уыл | Ми-ләү-шә |
| тау | та-уыш | Ра-уил |
| тәү | ә-үәл | Ҡә-үи |
| быу | бы-уа | Мәү-лит |
| кө-төү | шәү-лә | Ба-ныу |

— А-бау! Был кем?
— Мин — Ми-ләү-шә.
— Ә-ә, Ми-ләү-шә. Үт-үт.
— Һау-мы, Ба-ныу и-нәй?
— А-рыу ә-ле.
— Мәү-лит ҡайт-ты-мы?
— Ул кө-төү ҡар-шы-лай.

# Ң



| | | |
|---|---|---|
| аң | миң | ни-ңә |
| өң | моң | ми-ңә |
| уң | саң | ү-ңәс |
| иң | таң | у-ңай |

*

— Ал-ло, тың-ла-йым.
— Таң-һы-лыу, сә-ләм!
— Сә-ләм, Миң-ни-са!
— Таң-һы-лыу, саң-□ы-ла йө-рөп ки-лә-йек.
— Йә. Һин ми-ңә кил.
— Мин ун ми-нут-тан бу-лам.
— Ки-леш-тек.



**ң — н**

| | | |
|---|---|---|
| ми-нең | өң — өн | а-та-йың |
| һи-нең | миң — мин | ә-сә-йең |
| у-ның | тиң — тин | а-па-йың |

## Таң.

Таң атты. Һыу өҫтөнә томан төштө. Алыҫта аттар үлән утлай. Һыйыр көтөүе быуала һыу эсә. Тирә-йүн тыныс, һил. Мин һыу буйлап барам. Быйыл муйыл күп. Муйыл йыйып алам. Таңһылыу апайым тәмле бәлеш бешерер.



# Ғ ғ



| | | |
|---|---|---|
| Ға-та | ба-ға-на | ҡа-ра-ғат |
| Ғай-са | һа-ғы-ныу | ҡар-ға |
| Ғә-лим | бал-ға-лаҡ | йәй-ғор |

## Әкиәт.

Ҡарға турғай тотҡан. Ул ағасҡа ҡунған.

Төлкө:

— Ҡарға, нимә тоттоң?

— Турр... тур... — тигән ҡарға.

— Ишетмәйем. Асыҡ әйт!

— Турғай! — тигән ул бар көсөнә. Турғай ысҡынып, осоп киткән.



Шунан бирле ҡарға тулы исемен әйтмәй, ти.

— Ҡарр! Ҡарр! — ғына ти икән.

**ҡ — ғ**

| | |
|---|---|
| ҡалаҡ — ҡалағы | аҡ — ағыраҡ |
| ҡармаҡ — ҡармағы | суҡ — суғым |
| ҡаҡ — ҡағыу | таҡ — тағыу |




| | | | |
|---|---|---|---|
| гөл | бө-гөн | Ай-гөл | гөр-гөр |
| гол | и-ген | Гөл-шат | гөр-ләй |
| гер | и-гәү | Гөл-кәй | геү-геү |
| гел | кү-гәр-сен | Гә-рәй | геле-геле |

## Гөргөрлә уйыны.

Был уйын Гөлкәйгә бик оҡшай. Уны күмәк балалар бергәләп уйнай. Башта, бер урынға йыйылып, шыбаға то-то-ша-лар. Шыбаға — бер сыбыҡҡа ҡул тотошоу ул. Ҡулы

иң аҫта ҡалған бала гөрләүсе була. Шы-ба-ға-ны һа-наш-маҡ менән әйтәләр.

— Йә, кем һанашмаҡ әйтер?

**Һанашмаҡ.**

Гөр-гөр, гөргөрлө,
Бөтәһе лә гәүһәрле.
Ҡарға, сыпсыҡ,
Һин ҡалып тор,
Был сыҡ!



**г — ғ**

Гәрәй — Ғәли
игәү — ағай

**г — к**

| | |
|---|---|
| гөл — көл | тек — тегә |
| гер — кер | сик — сигә |

итек — итеге
көрәк — көрәге




| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ҙа | ҙә | ҙо | ҙө | ҙу | ҙү |

ҙур
ҙур-лау
ҙу-ра-йыу
ҙур-ҙар-са

аҙ
көҙ
ҡыҙ
ҡы-мыҙ

ҡаҙ-ҙар
өй-ҙәр
тау-ҙар
ҡар-ҙар

— Һау-мы-һы-ғыҙ, ҡоҙағый!
— Ә-ә, Мәҙинә ҡоҙаса. Арыуыбыҙ, арыуыбыҙ, уҙ-уҙ.
— Уҙмайым, тиҙ генә китәм. Ҡоҙағый, ҡоҙа менән беҙгә ҡаҙы ашарға, буҙа эсергә килегеҙ.
— Ә-ә-ә, һин са-ҡы-рыу-сы-мы ни, рә□-мәт төшкөрө?
— Эйе, ҡоҙағый.
— Йә! Кискә килербеҙ, ҡоҙаса.

### Мәҡәл.

Ҡыҙы барҙың наҙы бар.

**ҙ — ҫ**

баҙ — баҫ
үҙе — үҫә
аҙаҡ — уҫаҡ



# Зз





| | |
|---|---|
| зал | биз-мән |
| зонт | из-ге |
| зи-рәк | им-за |
| зин-һар | үз-бәк |

*

— Ал-ло, Зилә!

— Ә-ә, Гүзәл, тыңлайым.

— Гүзәл, әйҙә, зоо-парк-ка бара-йыҡ. Зоо-парк-та зеб-ра-лар, а-йыу-ҙар, кә-зә-ләр бар.

— Ә зубр бармы?

— Бар, зубр ҙа бар. Ул ҙур-р-р.

— Әйҙә, мин әҙер. Тик һин, зин-һар, зонт ал, йәме.

# Д д



| | | | |
|---|---|---|---|
| дүрт | бил-дә | за-вод | дың-дың |
| дә-рес | йон-доҙ | суд | дыр-дыр |
| да-ға | төн-дә | гид | дөр-дөр |

— Дамир, миңә әсәйем «Денди» алды.

— Ысынмы? Алдашаһың.

— Ысын алды. Ышанмаһаң, әйҙә күрһәтәм.

— Ә миңә атайым дөйә ала!

— Дөйә?

— Дөйә шул. «Денди» менән йөрөп



булмай. Ә дөйә менән мин А□рикаға барам. Белдеңме!

— Мак̧тансык̧!

**д — т**

| | |
|---|---|
| даға — тағы | дөйә — төйә |
| дала — тала | даулы — таулы |
| дейеү — тейеү | алдын — алтын |
| килде — китте | алдау — алтау |




| | | |
|---|---|---|
| ви-та-мин | ав-густ | Вил |
| ва-гон | ав-то-бус | Вил-нур |
| вок-зал | ди-ван | Ви-лә |

— Әсәй! Беҙгә ҡунаҡтар килә!
— Кемдәр, балам?
— Вил, Вәзир, Виктор.
— Ҡайһы Виктор?
— Азаматов Виктор!

— Виктор Азаматов буламы ни?

— Була шул! Беҙҙең менән уҡый.

— Һе, улай икән! Улым, вазаға виноград һал.

— Йә, әсәй.

**в — у (уы) — ү (үе)**

| | | | |
|---|---|---|---|
| Ва-тан | вә-ғә-ҙә | тау | һа-уа |
| вал-сыҡ | Вә-кил | та-уыҡ | се-үә-тә |

Һүрәттә ниндәй ваҡиға булған?






| | | | |
|---|---|---|---|
| фил | Фи-рү-зә | Ө-фө | шарф |
| фо-то | Фа-ти-ма | ә-лиф-ба | За-риф |
| фан-тик | Фә-ни-ә | Сә-фәр | Шә-риф |

## Өфө.

Фәһимә менән Фәнил Өфөгә килде. Өфө — ҙур һәм матур ҡала. Өфөлә магазиндар күп. Фәһимә үҙенә — уйынсыҡ фил, ә Фәнил фо-то-ап-па-рат һатып алды.



**Матур Өфө ҡалаһы.**

Ағиҙелдең буйы йәмле,
Гөл-сәскәле далаһы.
Шул иҙелдең буйҙарында
Матур Өфө ҡалаһы.

Өфө баҡсалары матур,
Гөл-сәскәгә күмелгән.
Йәйге көндә бер күрһәң дә,
Мәңге китмәй күңелдән.

(Ҡадир Даян.)






хә-бәр
хуш-бый
ха-лат

Хә-мит
Хә-ми-ҙә
Хам-мат

## Хат.

Хәлиҙә уҡырға, яҙырға тиҙ өйрәнде. Ул ҡалалағы әхирәтенә хат яҙҙы: «Хәбирә әхирәт! Мин уҡырға һәм яҙырға өйрәндем. Хәҙер ки-тап-ха-на-нан төрлө китаптар алып уҡыйым. Улар бик оҡшай. Киноға ла йөрөйөм. Һау бул. Хат яҙ. Сәләм менән Хәлиҙә».

## Көләмәс.

Рөстәмгә хәрефтәр өйрәтәләр:

— Был бәләкәй «а» хәрефе була!

— Шул «а» тора-бара ҙур «А» булып үҫәме? — тип һорай ул.

## Хоккей.

Мәктәптә хоккей командаһы бар. Харис ағай — тренер. Ул беҙҙе хоккей уйнарға өйрәтә.



# Жж



| | | | |
|---|---|---|---|
| жур-нал | и-жек | га-раж | жый-жый |
| жи-раф | у-жым | ба-гаж | жыу-жыу |
| жом | бө-жәк | таж | жыйт-жыйт |

**Тиҙәйткес.**

Уба уҙып, ужым урап,
Ухылдашып, уфылдашып,
Урманлыҡта, уҫаҡлыҡта,
Ун утындан усаҡ яҡтыҡ.

**ж — ш**

ижек — ишек
таж — таш

**Мәжит Ғафури** — башҡорт халыҡ шағиры.



## Эш һәм белем.

Эшсән кеше булыу — бик ҙур бәхет,
Эш ул — был тормоштоң үҙәге.
Уҡымышлы булыу — шул тормоштоң
Гәүһәр төҫлө матур биҙәге.

(Мәжит Ғафури.)






**ц**ирк | мо-то-**ц**икл
**ц**ифр | кон-**ц**ерт

## Цирк.

Утлы ҡулса үтә ырғый
Арыҫландар—ҡыйыуҙар.
Ә клоун мәҙәк яһап,
Көлдөрә лә көлдөрә.
Уны үртәп, йөнтәҫ кенә
Бәләкәс бер эт өрә.
Их, циркка йөрөр инем
Аҙна һайын, көн һайын!

(Әсхәл Әхмәт-Хужа.)

## ц — с

цирк — сирек
концерт — көсөк
пицца — кисә
циркуль — сиркәү

Ц хәрефе оҡшаған
П хәрефенә харап.
Ҡыҙығыраҡ булһын тип,
Тора ул аҫҡа ҡарап.

(Роза Ғәббәсова.)

## Көләмәс.

Өс йәшлек Айнур:

— Атай, өләсәйҙәргә ҡунаҡҡа барайыҡ.

Атаһы:

— Улым, мотоциклдың бензины бөткән. Йөрөмәй.

Айнур:

— Ат менән барайыҡ, атҡа бензин кәрәкмәй бит.

# Ч ч

чем-пи-он
чек
ча-бан

поч-та
У-ча-лы
фор-точ-ка



## «Чабан» олатай.

Бөгөн беҙҙә байрам. Олатайыма 75 йәш. Ул элек ауылда йәшәгән, һарыҡ көткән. Шуға уны «чабан олатай» тиҙәр. Олатайымдың тыуған көнөнә Чукотканан — инәйем, Чечняла хеҙмәт иткән ағайым, йүгереү буйынса чемпион апайым ҡайтты.




щи | щит
борщ | плащ

## Магазинда.

Шамил әсәһе менән магазиндарҙа йөрөнө. Әсәһе уға — шарф, ә үҙенә плащ һатып алды.

Йәшелсә магазинынан кәбеҫтә, кишер, һуған, сөгөлдөр алдылар. Был йәшелсәләрҙән щи йәки борщ бешерерҙәр.

ч | ш | щ



# Йомаҡтар.



Бабай ҡат-ҡат тун кейгән,
Сисендерһәң — иларһың.

Үҙе һимеҙ — майы юҡ,
Тиреһе ҡалын — йөнө юҡ.

Келәте бар, малы юҡ,
Балаһының һаны юҡ.

Үҙе генә ашалмай,
Унан башҡа аш бармай.

Ҡат-ҡат тунлы,
Ҡарыш буйлы.






| | | | |
|---|---|---|---|
| ял | аяҙ | Асия | ялп-йолп |
| яҙ | уяу | бая | япа-яңғыҙ |

**Яулыҡ йәшереү.** (Уйын.)

Ҡыҙҙар, малайҙар түңәрәкләп ергә ултыра. «Көтөүсе» түңәрәкте әйләнеп йырлап йөрөй ҙә һиҙҙермәй генә берәүҙең артына яулыҡ һалып китә. Кеше һиҙеп ҡалһа, «көтөүсе»не баҫтырып, яулыҡ менән һуға. Шунан һуң улар урындарын алмаша.

## Ямғыр, яу!

Яу, ямғыр, яу!
Яҙын яу!
Яҙылып яу!
Яйлы яу!
Ярҙарға яу!
Япраҡҡа яу!

(Әсхәл Әхмәт-Хужа.)

Яу, яу, ямғырым,
Ҡара тәкә һуйырмын,
Майын һиңә ҡуйырмын,
Итен үҙем ашармын.

Ямал япраҡтар йыйған,
Ямғыр быҫҡаҡлап яуған;
Яланып сыҡҡан ялман,
Яланғас ҡалған ялан.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.)

### Мәҡәл.

Ололарҙы ололау — яҡшылыҡтың билдәһе.

# Ее





| | | |
|---|---|---|
| ел | е-ләк | ет-меш |
| ем | е-меш | е-те |
| ер | е-рек | е-гет |

*

— Алло, Емеш!
— Алло, был кем?
— Был мин, Ерәнсә.
— Кем-кем, Ерәнсә сәсәнме?
— Сәсән түгел, Ерәнсә генә.







| э — е (э) | е — (йе) |
| --- | --- |
| эш — этáж | йылан — елән |
| эл — электр | йыл — ел |
| эт — этажéрка | йылкы — елкә |

## Еүәйрә.



Епшек елдә еүешләнмәҫ,
Еңмешләнмәҫ Еүәйрә.

(Әсхәл Әхмәт-Хужа.)




юл
Ю-лай
юр-ға

юр-ған
юл-даш
юл-ба-рыҫ

йү-кә
Йү-рү-ҙән
йү-гән

## Юртаҡтар.

Ат сабыштырыу — борондан килгән йола. Юлай менән Юныс һабантуйҙа юртаҡтар ярышында ҡатнашты. Юлай беренсе килде. Юныс икенсе урынды алды.





## Хаҡым бар.

Атай әйтә: батырым,
Әсәй әйтә: матурым,
Олатайым: алтыным,
Өләсәйем: яҡыным.
Батыр ҙа мин, матур ҙа,
Алтын да мин, яҡын да.
Маҡтанырға саҡ ҡына
Барҙыр минең, шулай булғас,
Хаҡым да.

(Ринат Шакир.)



**Салауат Юлаев —**
башҡорт халыҡ батыры.

Йүгереп мендем тауҙарға,
Аҡ кейеккәйҙәрҙе ауларға.
Юлай улы батыр Салауат
Ҡаршы сапты килгән яуҙарға.

Салауаттың булат ҡылысы
Килешеп тора ине биләндә.
Салауат батыр үҙе китһә лә,
Даны ҡалды тыуған иләндә.

(Халыҡ йырҙары.)





## Тыуған илем.

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым, —
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

Күгәреп күккә үрелгән
Ҡарлы башын Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

(Салауат Юлаев.)

Йүнле менән юлдаш булһаң — шатланырһың;
Йүнһеҙ менән юлдаш булһаң — ҡартайырһың.






шо-фёр | ёл-ка
шах-тёр | ла-рёк

## Монтёр ағай.

Хәмит ағай — монтёр. Ул өйҙәргә электр уты ҡабыҙа. Хәмит ағайҙың Алёша исемле дуҫы бар. Ул шофёр булып эшләй. Кисә Алёша ағай мәктәпкә ёлка алып килде. Ёлканы зал уртаһына ҡуйҙылар. Хәмит ағай электр үткәрҙе.

са-мо-лёт
вер-то-лёт

**е — (й+е)** | **ё — (й+о)**
**ю — (й+у)** | **я — (й+а)**

## Шофёрҙар.

Машинала елеп барам,
Ту-ту-ту, юлда торма!
Төҙөлөшкә ҡом ташыйым,
Фермаға — оҙон торба.

Кәрим — күрше ауылға,
Вил йыйына урманға.
Рәсим йырлай-йырлай
Һыу һиптерә урамға.

(Айһылыу Йәғәфәрова.)



# Ь





| | |
|---|---|
| конь-ки | бирь-яҡ |
| паль-то | көнь-яҡ |
| аль-бом | төнь-яҡ |

## Коньки шыуабыҙ.

Ҡасан ғына тулҡынланып
Ағып ятҡан һыу туңған;
Йылға, беҙҙең килеүгә тип,
Бүләк әҙерләп ҡуйған.

Һыуыҡҡа ҡарап тормайбыҙ,
Беҙ һаман да шундабыҙ;
Йәйен йөҙөп рәхәтләндек,
Хәҙер коньки шыуабыҙ.

(Гөлфиә Юнысова.)





ши-нель | де-кабрь | мәсь-ә-лә

Ҡыш айҙары: декабрь, ғинуар, февраль.

Яҙ айҙары: март, апрель, май.

Йәй айҙары: июнь, июль, август.

Көҙ айҙары: сентябрь, октябрь, ноябрь.

## Аҡ ҡуян.

Ап-аҡ ҡына бер ҡуян
Сабып йөрөй аҡ ҡарҙа.
Ҡурҡмай бүре, төлкөнән
Аҡ ҡына туны барҙа.

(Әлфиә Әсәҙуллина.)

# Ъ





| | |
|---|---|
| аръ-яҡ | ҡулъ-яу-лыҡ |
| Яхъ-я | Аҡъ-яр |
| Тамъ-ян | буръ-яҡ |
| донъ-я | ашъ-яу-лыҡ |

## Кино.

Яхъя менән Тамъян киноға барҙылар. Улар «Төньяҡ океан» тигән фильм ҡаранылар.

*

— Ә-ә, сәләм, Яхъя! Хәлдәр нисек?

— Рәхмәт, яҡшы. Ә һинең?

— Минең дә һәйбәт. Һин беләһеңме, мин Ильяс ағайым менән Аҡъярға китәм.

— Аҡъярға? Унда нимә эшләйһең?

— Аҡъярҙамы? Таналыҡта һыу инәм, ҡыҙынам, мал ҡаршылайым; өләсәйемә ярҙам итәм.

**ь — ъ**

бирь-яҡ | аръ-яҡ



## Яңы йыл килә.

Бар тирә-яҡ һөттәй ап-аҡ,
Ем-ем итеп ҡар көлә:
Көмөш ҡыңғырауҙар тағып,
Беҙгә Яңы йыл килә.

Көртҡә сумып ҡойона шыршы,
Энәһе йәшел генә;
Йәшел ҡыңғырауҙар тағып,
Беҙгә Яңы йыл килә.

Күктә йондоҙҙар бейейҙәр,
Еҙ ҡыңғырау — ай елә;
Арғымаҡтарын ярһытып,
Беҙгә Яңы йыл килә.

(Хәким Ғиләжев.)



## Яңы йыл байрамы.

Йылтыр-йылтыр уйынсыҡтар
Йылтырайҙар шыршыла.
Эх, күңелле, бик күңелле
Яңы йылды ҡаршылау.

Шыршы матур биҙәкләнһә,
Ҡыш бабай ҙа ярата.
«Ҡотло булһын Яңы йыл!» —
тип,
Беҙгә бүләк тарата.

(Рәғиҙә Янбулатова.)




А Б В Г Ғ Д Ҙ
Е Ё Ж З И Й К
Ҡ Л М Н Ң О Ө
П Р С Ҫ Т У Ү Ф
Х Һ Ц Ч Ш Щ
Ъ Ы Ь Э Ә Ю Я

**Рәшит Ниғмәти** — башҡорт халыҡ шағиры.





## Теләк.

Башланып китте уҡыуҙар
«А» тигән хәреф менән,
Атайҙарыбыҙ ҙа элек
Башлаған ана шунан.

«Я» тигән һуңғы хәрефкә
Барып еткәйнек бер саҡ,
Бөтә серҙәрен һөйләргә
Асылды беҙгә китап.



**Мортаза Рәхимов —**

Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты.

## 11 октябрь —

## Башҡортостан

## Республикаһы

## көнө.







Нефтекамск
Бөрө
Туймазы
Өфө
Октябрьский
Бәләбәй
Учалы
Стәрлетамаҡ
Белорет
Ишембай
Салауат
Мәләүез
Күмертау
Сибай
Баймаҡ

— Һин Башҡортостан тураһында нимә беләһең?

— Башҡортостан — республика.

— Ул Азияламы әллә Европаламы?

— Ул Азияла ла һәм Европала ла. Баш ҡалаһы — Өфө.

— Афарин! Тағы нимә беләһең?

— Мортаза Рәхимов — беҙҙең Президент икәнлеген беләм.

— Афарин!

— Ә һин шәжәрәңде беләһеңме?

— Шәжәрә нимә һуң ул?

— Шәжәрә — атай, әсәй, олатай, өләсәй, уларҙың атай-әсәйҙәре, олатай-өләсәйҙәре һәм башҡа ата-бабалары, туғандары тураһында яҙып ҡалдырылған ҡомартҡы. Һәр кем үҙ нәҫеле, ата-бабалары, туғандары менән ҡыҙыҡһынырға, уларҙы белергә һәм хөрмәтләргә бурыслы. Аңланыңмы?

— Аңланым. Мин дә олатайымдан үҙ нәҫелебеҙ тураһында һорашып, шәжәрә төҙөп ҡарармын.

# Мин.

Мин малай (ҡыҙ). Исемем — Азат (Ләлә). Фамилиям — Мөхтәров (Мусина). Миңә 7 йәш. Сысҡан йылында тыуғанмын. 1-се класс уҡыусыһымын.

Бына көҙгө. Көҙгөлә мин торам. Мин матур ҡыҙ. Күҙҙәрем ҡара төҫтә, муйыл кеүек. Танауым бәләкәй. Ҡаштарым ҡыйғас. Керпектәрем оҙон. Сәсем оҙон, ҡап-ҡара, толомлап үрелгән. Ауыҙым бәләкәй генә. Ирендәрем ал, улар йылмайып тора. Тештәрем әле насар. Тиҙҙән яңы тештәрем сығыр.

Мин шаян малай. Йомшаҡ күңелле, илгәҙәк, йомарт, эшсәнмен. Мин ғәҙел, тура һүҙле, иғтибарлы, талантлы, көслө. Мин лидер. Холҡом үҙемә оҡшай.

Бына күлдәгем. Ул күк төҫтә, матур, таҙа. Бына пальтом. Ул ҡара төҫтә, оҙон,

йылы. Башымда аҡ йөндән бәйләнгән башлыҡ. Муйынымда мамыҡ шарф. Уны әсәйем бәйләне.

Аяғымда — быйма, йөн ойоҡбаш. Быйманы олатайым алып килде.

Ойоҡбашты, бейәләйемде өләсәйем бәйләне.

Бына салбарым менән свитерым. Уларҙы атайым Мәскәүҙән алып ҡайтты.

## Был мин.



Бына танауым,
Был минең ҡашым,
Күҙем, ҡолағым,
Ә бына башым.

Ауыҙҙы асһам,
Телем күренә.
Теҙелгән тешем
Өс бөртөк кенә.

Ҡулды күтәрҙем —
Аяҡ тыпырлай.
Үҙенән-үҙе
Бейергә һорай.

(Рәсимә Ураҡсина.)

## Минең ғаиләм.

Был мин. Был атайым. Ул шофёр. Ә был әсәйем. Ул врач. Был ҡартатайым һәм ҡартәсәйем. Атайым — уларҙың улы. Был апайым. Ул 10-сы класта уҡый. Минең ағайым да бар. Тик әле ул Мәскәүҙә уҡый. Ул дипломат була. Минең тағы бер олатайым һәм өләсәйем бар. Әсәйем — уларҙың ҡыҙы. Улар Сибайҙа йәшәй.

Беҙ бик татыу йәшәйбеҙ. Атайым менән әсәйем эштән ҡайтыуға, беҙ апайым менән өй йыйыштырып, эш бөтөрөп торабыҙ. Ҡартәсәйем аш бешерә. Ҡартатайым магазинға бара. Атайымдар ҡайтҡас, бергәләп ашайбыҙ, көләшәбеҙ, сәй эсәбеҙ. Мин үҙебеҙҙең ғаиләне бик яратам.

## Мин һәм атайым.

Мин Азат. Фамилиям — Ғәлин. Был атайым. Уның исеме — Айрат. Уның фамилияһы ла — Ғәлин.

Атайым — шофёр. Ул машинаһын бик ярата. Ул уны йыуа, таҙарта, йүнәтә.

Мин дә машина яратам. Атайыма булышам, машинаһын йыуышам, һөртәм. Беҙ атайым менән бергә балыҡҡа ла барабыҙ. Атайым мине бик ярата. Мин дә уны яратам. Тик ҡайһы берҙә атайымдан мин ҡурҡам. Сәғәтте, видеоны боҙһам, ҡустымды ҡарамаһам, атайым асыулана.

Инде мин ҙур. Башҡаса сәғәтте, видеоны боҙмайым. Атайым — һәйбәт кеше. Ул беҙгә бүләктәр ҙә ала.

## Мин һәм әсәйем.

Был мин. Минең исемем — Салауат. Фамилиям — Мусин. Был минең әсәйем (инәйем, әнейем).

Әсәйем — уҡытыусы. Ул икенселәрҙе уҡыта. Әсәйем үҙенең уҡыусыларын бик ярата. Улар ҙа әсәйемде ярата. Әсәйемде мин дә яратам.

Әсәйем бик ҡыҙыҡ әкиәттәр белә, тәмле итеп бишбармаҡ бешерә. Әсәйемдең ҡулдары һәр саҡ йылы, йомшаҡ. Шуға мин әсәйемдең башымдан һыйпауын, арҡамдан һөйөүен яратам. Әсәйем һөйгәндә, миңә рәхәт була.



## Әсәйҙәр бер генә.

Әсәйҙәр йылмайғас,
Өй эсе йәмлерәк,
Әсәйҙәр бешергән
Аштар ҙа тәмлерәк.

Әсәйҙәр яраткас,
Шат беҙҙең йөҙөбөҙ.
Әсәйҙәр булғанға
Бәхетле көнөбөҙ.

Әсәйҙәр бер генә —
Ҡәҙерен беләйек.
Йөрәктәр йылыһын
Уларға бирәйек.

(Әлфиә Әсәҙуллина.)





## Әсәйем.

Ҙур үҫәйем, әсәйемдә
Ҡарармын үҙем генә.
Тәмле сәйҙәр эсерермен,
Һыу ташып түҙем генә.

Әҙерләрмен аш-һыуын да,
Керҙәрен дә йыуырмын,
Бөхтә йөрөһөн әсәй, тип,
Үтекләп тә ҡуйырмын.
Иркәләрмен гел генә,
Әсәйем бит бер генә.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.)



## Һамаҡ.

Сап, сап, мунса сап,
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Атаң-әсәң балаһы.
Атаң киҫкән утын түгел,
Әсәң барған һыу түгел.
Сап, сап, мунса сап!

## Мин һәм олатайым.

Мин Азамат Вәлиев. Әле Өфөлә йәшәйем. Ә был минең олатайым. Ул да хәҙер Өфөлә йәшәй.

Олатайым элек ауылда йәшәгән. Уның Турат исемле аты булған. Турат бик шәп ат булған. Олатайым уны яратҡан. Турат та олатайымды яратҡан. Олатайым киткәндә, Турат илап ҡалған. Аҙаҡ Турат үлгән. Олатайым да илаған. Ул әле лә Туратты һағына.

Мин дә ат яратам. Йәй булғас, ауылға олатайым менән барам. Олатайым мине, атта һыбай йөрөргә өйрәтәм, тине.

Олатайым мине бик ярата. Мин дә олатайымды бик-бик яратам.

Олатайым хәҙер ҡартайған. Ул арый. Мин уға калушын, таяғын, эшләпәһен алып бирәм. Олатайым яй ғына атлай. Олатайым менән урамға сыҡҡанда, мин йүгермәйем, яй ғына атлайым. Йүгерһәм, олатайым артта ҡала. Мин уны көтәм һәм өйгә алып ҡайтам.

## Мин һәм өләсәйем.

Мин Айнур Гәрәев. Ә был минең өләсәйем. Өләсәйем мине бик ярата. Ул ҡоймаҡ бешерә, миңә шоколад алып бирә. Йыл да миңә йылы ойоҡбаш, бейәләй бәйләй.

Кис булһа, өләсәйем минең эргәмә ултыра, сәстәремдән һыйпай һәм әкиәт һөйләй, йомаҡ ҡоя. Ҡайһы саҡта өләсәйем йырлап та ебәрә. Өләсәйемдең тауышы, ҡулы кеүек, бик йомшаҡ, яғымлы.

Мин өләсәйемде бик яратам. Өләсәйемә ярҙам да итәм. Йомғағын, күҙле-

ген, энәләрен алып бирәм. Урамға сыҡһа, калушын, яулығын, шәлен килтереп бирәм.

Өләсәйем насар күрә, шуға мин уға китап, гәзит уҡыйым. Өләсәйем намаҙ уҡығанда, уға намаҙлыҡ килтерәм.

Ураҙала өләсәйем менән бергәләп ауыҙ асабыҙ. Ауыҙ асыу миңә оҡшай. Өләсәйем һәр саҡ тәмле-тәмле ризыҡтар: йөҙөм, ҡоймаҡ, бауырһаҡ ашата. Өләсәйем ураҙала көнө буйы ашамай, ураҙа тота, миңә бәхет теләй.

## Өләсәй.

Ауылдағы өләсәйгә
Һокланмаған кеше юҡ.
Бөтәһе лә маҡтай уны:
«Уңғанлыҡта — ише юҡ.

Аптырарһың, — тиҙәр уға, —
Белеме булмаһа ла,
Гөлдәй балаҫтар туҡый ул,
Киндер ҙә һуға ала».

(Кәрим Булат.)

## Мин һәм ағайым.

Мин Айгиз Булатов. Миңә 7 йәш. Ә был минең ағайым Илгиз. Уға 18 йәш.

Ул әле Мәскәүҙә уҡый, дипломат була. Шуға ла япон телен өйрәнә.

Мин дә ҙурайғас, шофёр була алмаһам, дипломат булам. Дипломат булғас, үҙемә, ағайыма компьютер һатып алам. Ағайыма япон телен яҡшы өйрәнер өсөн компьютер кәрәк. Ә ағайымдың аҡсаһы юҡ.

Ағайымды мин бик яратам. Ағайым да мине ныҡ ярата. Каникулға ҡайтҡанда ул миңә фломастер, яңы видеофильм алып ҡайтасаҡ.

Ағайымдың ҡышҡы каникулында беҙ бергә саңғыла, конькиҙа шыуҙыҡ. Бергәләп япон телен өйрәндек. Мин хәҙер японса ла беләм. Әлегә 2 генә һүҙҙе. Ә ағайым японса һөйләшә ала.

Мин ағайымды бик һағындым. Ҡасан ҡайтыр икән?.. Японса өйрәнер инек...

## Мәҡәл.

Ағаһын күреп, ҡусты үҫер, апаһын күреп, һеңле үҫер.

## Мин һәм ҡустым.

Мин Гүзәл Ғарипова булам. Ә был минең ҡустым. Уға 5 йәш. Исеме — Рөстәм.

Рөстәм — бик шуҡ малай. Ул минең ручкама, ҡәләмдәремә, китаптарыма ҡайһы бер саҡта тейә. Мин уға асыуланам, тартып алам. Ҡайһы саҡта илайым.

Әсәйем беҙгә: «Дуҫ булығыҙ! Дуҫ булмаһағыҙ, Саҡ менән Суҡ кеүек ҡошҡа әйләнерһегеҙ, бер-берегеҙҙе күрә алмаҫһығыҙ», — ти. Ул, ҡустым менән икебеҙҙе эргәһенә ултыртып, бәйет һөйләне.

Әсәйем һөйләп бөткәс, ҡустым менән икәүләп илай башланыҡ. Ҡустымды бик йәлләнем. Ҡәләмдәремде уға бирҙем. Ул да миңә боҙмай, һындырмай ғына яҙырға һүҙ бирҙе.

Ҡустым һәйбәт минең. Мин уны яратам. Бергә урамға алып сығам. Киноға бергә барабыҙ. Ул да мине ярата. Миңә һауыт-һаба, иҙән йыуырға ярҙам итә. Мин мәктәптә саҡта, мине һағына, көтә. Ҡайтҡас ҡыуана, бергәләп уйнайбыҙ.

# Минең туғандарым.



## Ҡустым.

Эй һөйләшә бер үҙе,
Аңлашылмай һис һүҙе.
Тәү аҙымдарын атлай,
Йығылһа, илап ятмай.
Әлли-бәлли бәү иткән,
Арып йоҡоға киткән.
Йә йылмая, йә көлә, —
Ҡустым матур төш күрә.

(Г. Ғәлимова.)

## Өләсәй нимә тине?

Әнүр кәнфит ҡапҡайны ғына, электән һелкенеп торған алғы теше келт итеп ауыҙынан килде лә төштө. «Әсәй!» — тип ҡысҡырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды малай. Төпкө бүлмәнән өләсәһе ынтылып ҡараны.

— Әсәйең магазинға китте, улым.

Өләсәһененең йомшаҡ тауышын ишеткәс, Әнүр иркәләнеп:

— Өлә-әсәй-й, — тип һуҙып илап ебәрҙе.

— Ни булды, бәпкәм? — Өләсәһе, бәйләмен ташлап, уның янына өлтөрәп килеп етте.

— Те-шем төш-тө.

— Ауыртамы ни?

— Ю-уҡ.

— Әтү ни эшләп илайһың?

— Тешемде йәлләйем. Ҡайҙа ҡуяйым инде уны хәҙер?

— Тешеңде усыңа йом. Анау уйынсыҡ көрәгеңде лә ал. Әйҙә, бер ергә киттек.

Бәрәңге баҡсаһының сиҙәм осона еткәс, өләсәһе ейәненә соҡор ҡаҙырға ҡушты.

— Серек теш сысҡанға булһын, тип теләк телә лә тешеңде ошо соҡорға күм, — тине ул.

Әнүр бөтәһен дә өләсәһе өйрәткәнсә эшләне. Сысҡанға серек теш ниңә кәрәклеген бик белгеһе килһә лә һорашманы. Үҙ ҡайғыһы ҙурыраҡ ине уның.

— Ә мин шулай тешһеҙ ҡалырмынмы икән?

— Балаларҙың теше яңынан үҫә ул, улым. Илама. Ә бына тешең серемәһен, тиһәң, уның сере бар.

— Ниндәй сер, өләсәй? Өйрәт тиҙерәк.

Өләсәһе эйелеп, ейәненең ҡолағына нимәлер шыбырланы.

Әнүр, өйгә ҡайтыу менән, үҙенә тип алынған, әммә быға са бер ҙә тотонмаған теш щёткаһын алып, уның өҫтөнә ап-аҡ паста һалды.

Әсәһе ҡайтып ингәндә, Әнүр тырышып-тырышып теш таҙарта ине.

Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, өләсәһе Әнүргә нимә тип әйтте икән?

(Фәүзиә Латыпова.)



## Мин һәм дуҫтарым.

Минең исемем — Айгөл. Миңә 7 йәш. Мин беренсе класта уҡыйым. Уҡыуҙы, мәктәпте бик яратам. Һәр көн тиҙерәк таң атыуын, мәктәпкә барыуҙы өҙөлөп көтәм. Мәктәптә минең дуҫтарым күп. Алһыу менән Гүзәл — иң яҡын әхирәттәрем. Уларға мин яҡын торам, бергә уҡырға барабыҙ. Дәрестән һуң беҙ гел бергә уйнайбыҙ, киноға ла йөрөйбөҙ.

Алһыу — бик сабыр, баҫалҡы ҡыҙ. Беҙ уның менән бер ваҡытта ла үпкәләшмәйбеҙ.

Гүзәл әҙерәк ҡыҙыуыраҡ, әммә ғәҙел. Шуға үпкәләшеп тә алабыҙ. Әммә бик тиҙ онотабыҙ, шуға ла яҡын әхирәттәрбеҙ.

Мин үҙем әхирәттәремде үпкәләтмәҫкә тырышам. Был миңә ҡыйын бирелә, сөнки мин үҙ һүҙле, ҡыҙыу, үпкәсел, ғәфү үтенә белмәйем.

Хәҙер мин ҙур ҡыҙ, уҡыусы. Шуға үҙемә, әхирәттәремә, әсәйемә яҡшыға үҙгәрергә һүҙ бирҙем.

## Дуҫым, серҙәшем.

Минең дуҫтарым бик күп. Улар араһында яҡын дуҫым — Динә Мәүлитҡолова. Әхирәтем менән балалар баҡсаһынан бирле танышбыҙ. Бер класта уҡыйбыҙ.

Әхирәтем яҡшы уҡый, ярҙамсыл. Ул төрлө спартакиадаларҙа ла ҡатнаша.

Тормошта төрлөһө була, ҡайһы саҡ үпкәләшәбеҙ, әммә шул уҡ көндө тағы дуҫлашабыҙ. Әхирәтем кеүек аҡыллы, уңған ҡыҙҙар беҙҙең арала күберәк булһын ине.

(Лилиә Ғибәҙәтова.)

* * *

Минең дуҫтарым араһында ҡоштар, йәнлектәр һәм хайуандар ҙа бар. Мин уларҙы яратам, өйрәнәм, улар тураһында шиғырҙар, әкиәттәр уҡырға, тыңларға яратам.

## Мәҡәл.

Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын.

## Ҡуян.



Алғы аяғы ҡыҫҡа,
Сабырға ул бик оҫта.
Һоро тунын һала ла
Аҡ тунын кейә ҡышҡа.

Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,
Ҡолағы оҙон икән.

(Мәһинур Бикбова.)





## Бесәй менән сысҡан.

Бесәй сыҡҡан һунарға,
Ҡомаҡ, сысҡан ауларға.
— Хәҙер барып тотам, — ти, —
Һоғонам да йотам! — ти.

(Берйән Байым.)







## Тейен.

Ялҡын keүек ялт-йолт итә,
Ҡапыл һикереп китә.
Йәйе унының эштә үтә,
Ҡышын сәтләүек сиртә.

(Ғ. Бирҙин.)

## Болан.

Ҡарағыҙ: болан килгән,
Бесән ваҡытын белгән.
Ә башына берәү түгел,
Ике тырмаһын элгән.

(Рәмзәнә Абуталипова.)



# Һарыбай.

*(Әкиәт.)*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер әбей менән бабай. Уларҙың Һарыбай исемле эттәре булған. Һарыбайҙы улар яраткандар, яҡшы ашатҡандар.

Бына бер саҡ уларҙың балаһы тыуған. Шунан алып хужалар Һарыбайҙы ҡарамай башлаған. Эт ябыҡҡан, ауырыған. Бер көндө Һарыбай хужаһы менән урманға барған. Унда үҙенең дуҫы бүрене осратҡан. Уға хәлен һөйләп биргән.

— Ҡайғырма, Һарыбай. Оҙаҡламай һин рәхәт йәшәй башларһың, — тигән бүре.

Йәй еткән, игендәр өлгөргән. Әбей менән бабай иген урырға баҫыуға килгәндәр. Балаларын арбаға һалғандар, Һарыбай арба аҫтында ятҡан.

Көтмәгәндә бүре килеп сыҡҡан һәм баланы алып киткән. Һарыбай өрә-өрә бүрене ҡыуып еткән дә баланы алып ҡалған. Бабай менән әбей быға бик ҡыуанғандар. Шунан бирле Һарыбайҙы яҡшылап ҡарай башлағандар.



## Сыйырсыҡ.

Сыйырсыҡ! Сыйырсыҡ!
Ояңдан осоп сыҡ!
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң-көйөң!
Ҡошсоғом сыҡты ла,
Ҡанатын ҡаҡты ла
Һоҡланды ояға,
Таң ҡалды донъяға.

(Рәми Ғарипов.)



## Асыуланма, Сыбарҡай.

Себештәргә ем һиптем —
Турғайҙар килеп етте.
Сыбар тауыҡ асыуынан
Ҡабарып, туҙып китте.
— Бәләкәс бит улар ҙа,
Сыбарҡай, ҡыума инде!
Бөтәгеҙгә лә етерлек
Өҫтәп һибермен емде.

(Рәмзәнә Абуталипова.)





## Күгәрсен.

«Гөл! Гөл! Гөл!» — ти гел генә,
Гөл ярата, күрәһең,
Беҙҙең баҡса эргәһендә
Оялаған күгәрсен.

## Торна.

Һаҙҙа иртүк тора ла
Миңә:
— Торма! Торма! — ти.
Атай был ҙур ҡоштарҙы:
— Торма түгел, торна, — ти.

## Өйрәк.

Ҙур-ҙур емдәр бирһәм дә,
Ул һаман да:
— Ваҡ! Ваҡ! — ти.
Үҙенә гел баҡһам да,
Ул һаман да:
— Баҡ! Баҡ! — ти.

(Рауил Ниғмәтуллин.)





## Дуҫтар.

I

Сабир ҡоштарҙы ярата. Уларға таш менән бәрмәй, йомортҡаларын алмай. Шуға ҡоштар уны танып торалар. Иртәнсәк Сабирҙы бейектән осоп барыусы торна: «То-райыҡ, торайыҡ», — тип уятып китә.

Уның тороуын күреп, һылыу сыйырсыҡтар үҙҙәренең ояларынан сығалар ҙа:

— Шундай сыуаҡ, шундай сыуаҡ,
Салт аяҙ, салт аяҙ,
Сабир, сыҡ, сыҡ, —

тип уны саҡыралар. Сабир урынын йыйыштыра, йыуына, ашай ҙа, китаптарын алып, мәктәпкә барырға сыға. Шаян тауыҡтар уға ҡаршы йүгереп киләләр ҙә:

— Ҡыт-ҡыт!.. Ҡыҙыҡ таптыҡ! — тип кеткелдәп хәбәр һөйләйҙәр.

Ә әтәс ем тапҡан да тауыҡтарҙы үҙ янына саҡыра:

— Кикири-күк, иҫегеҙ китер, күп!

## II

Сабир мәктәптән ҡайтҡанда, ҡоштар уны шатланып ҡаршылайҙар һәм һорауҙар менән күмеп ташлайҙар:

— Нисә-нисә-нисә? Нисек, нисек?

Ә ҡайһы бер турғайҙар, шаяртып:

— Өсмө? Өсмө? Өс! Өс! — тиҙәр.

Ҡаҙҙар, риза булмайынса, урыҫса ғына:

— Как? Как? Как? Как это так? — тип ҡаңғылдайҙар.

Сабир уларға бармаҡ янай ҙа:

— Биш, — ти, йылмайып.

— Биш-биш! Шәп-шәп! Шәп-шәп! — тип маҡтарға тотоналар ҡоштар.

— Булдырған! Булдырған! — тип ҡыуаныстарынан бейейҙәр күркәләр.

Шул ваҡыт ҡанаттарын һалмаҡ ҡына ҡағып үтеп барыусы ҡарғалар:

— Ҡырға барайыҡ! Ҡырға барайыҡ! Ҡарап ҡайтайыҡ! Ҡарап ҡайтайыҡ! — тип өндәйҙәр Сабирҙы.

## III

Дәресен әҙерләгәс, Сабир иптәштәре менән яланға китә.

Бер бүҙәнә Сабирҙы күреп, ҡоштарға һөйөнсөләй:

— Дуҫ килде, дуҫ килде!

Икенселәре унан һорайҙар:

— Кем килде? Кем килде?

Улар Сабирҙың исемен әйтә белмәйҙәр. Шуға күрә тәүге бүҙәнә, Сабирҙың фамилияһын ҡабатлап:

— Хәт-муллин, Хәт-муллин, — ти.

(Фәрит Иҫәнғолов.)



## Кем минең әсәйем?

Яңы ғына тыуған һары себеш ишек алдына сыҡты.

— И-их, ҡалай күңелле! — тип шатланды ла һары күбәләкте ҡыуырға тотондо. Күбәләк тотторманы.

Йөрөнө-йөрөнө лә Һарыҡай асығып китте. «Минең әсәйем булырға тейеш», — тип уйланы ул һәм әсәһен эҙләй башланы.

— Һин минең әсәйем түгелме? — тип һораны ул шунда ятҡан быҙауҙан.

— Мин үҙем дә бәпес кенә әле, му-у-у,— тип ҡуйҙы быҙау.

— Ә ниңә һин шул тиклем ҙу-ур?

— Минең әсәйем дә ҙур, үәт.

Арбаға бәйле ат тора. Себеш уның янына барҙы ла:

— Һеҙ минең әсәйем түгелме? — тип һораны.

— И-һа-һа-һай! Мин — ат. Мин бер кемдең дә әсәһе түгел.

Аттың көслө тауышынан ҡурҡып, Һарыҡай тупһаға барып менде. Унда бер бесәй ята ине.

— Һеҙ минең әсәйем түгелме? — Һарыҡай уға өндәште.

— Теләһәң, мин һинең әсәйең була алам, мыррау, — тине бесәй. — Кил, Һарыҡай, йомшаҡҡай, тотоп ҡарайым үҙеңде.

— Уау-уау, — тине ояһынан эт. — Ышанма, алдай ул һине. Һинең әсәйең — Ҡыҙыл тауыҡ, атайың — Әтәс. Р-р-р.

Эттең тауышына әтәс килеп сыҡты ла:

— Ки-ки-ри-кү-үк! Бесәйҙән зыян күүп!— тип ҡысҡырҙы. — Әйҙә, һине әсәйең көтә, — тип Әтәс Һарыҡайҙы әсәһенә алып барҙы.

(Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.)

Һин ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе беләһеңме? Уларҙы аңлайһыңмы? Теле булһа, улар нимә һөйләр ине? Ҡоштар, йәнлектәр, хайуандар тураһында ниндәй әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, йырҙар беләһең?

Түбәндәге һүрәткә ҡарап, хикәйә төҙө.





## Алпамыша батыр.

*(Әкиәт.)*

I

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың улдары тыуған. Уға Алпамыша тип исем ҡушҡандар. Малай ай үҫәһен көн үҫкән, йыл үҫәһен ай үҫкән, ти.

Бер саҡ Алпамыша майҙан буласағын ишетеп ҡалған. Шунда барып, ба-

тырҙар менән көс һынашмаҡсы иткән. Атаһынан ат һораған.

— Анау йылҡылар араһынан үҙеңә ҡараған атты һайлап ал, — тигән атаһы.

Алпамышаға нас-а-ар ғына бер ат ҡарай. Егет уны эйәрләй ҙә ҡайтырға сыға. Киләә торғас, ат яҡшы бер толпарға әйләнә.

— Күҙеңде йом, батыр, — ти ул.

Алпамыша күҙ йомоп алғансы, ат уны майҙан барған ергә илтеп ҡуя.

II

Халыҡ йыйылған, көрәш бара, ти. Ҡарабатыр исемле бер батыр менән алышҡа сығырға берәү ҙә баҙнат итмәй икән. Алпамыша сыға быға ҡаршы. Былар, алыша торғас, икеһе лә тубыҡҡа тиклем ергә бата. Бер ваҡыт теге Ҡарабатырҙы Алпамыша ерҙән һурып алып, күккә сөйөп ебәрә.

Батша:

— Ҡарабатырҙы кем еңә, сабып килгән килеш ҡулса күҙәүенән кем уҡ үткәрә, ҡыҙымды ашамаҡсы булып килгән алты башлы аждаһаны кем үлтерә,



шуға ҡыҙымды һәм ярты батшалығымды бирәм, — тип шарт ҡуйған була.

Алпамыша тәүге шартты үтәне бит инде. Хәҙер икенсеһен атҡарырға кәрәк. Береһе лә уғын ҡулса күҙәүенән үткәрә алмай. Ә Алпамышаның уғы, күҙәүҙән үтеп сығып, майҙан уртаһына килеп ҡаҙала.

Алпамыша аждаһа менән ике төн, ике көн алыша. Өсөнсө көндө Алпамыша аждаһаның аҙаҡҡы башын өҙөп алып, ҙур бер таш аҫтына ҡыҫтырып ҡуя.

— Ярар, егет, әйткән һүҙемдә торамын, — ти батша. — Айһылыу ҡыҙымды һиңә кәләшлеккә бирәм, — ти.

Туй яһайҙар. Алпамыша ата-әсәһен дә үҙенең янына күсереп алып килә.

## Ике ҡуян балаһы.

Әсәйҙәре өйҙә юкта ҡуян малайҙары бик асыҡҡан.

— Өләсәйҙе һағындым, әйҙә ҡунаҡҡа барабыҙ, — тигән береһе.

— Әйҙә, мин дә һағындым, — тигән икенсеһе. — Уның баҡсаһында кишер күп.

Болон буйлап барғанда, икеһенә ике ҙур кишер тапҡандар былар.

— Һинең ҡунаҡҡа барғың киләме? — тип һораған беренсе ҡуян малайы.

— Юҡ, хәҙер килмәй, — тип яуап биргән икенсе ҡуян малайы.

— Минеке лә килмәй, — тигән беренсеһе.

Өләсәйҙәрен һағынғандармы был ҡуян малайҙары?

(Илдус Тимерханов.)

## Еҙ ҡыңғырау.

Еҙ ҡыңғырау, еҙ ҡыңғырау,
Дуҫымдай күрәм һине,
Мәктәбемә тәүге тапҡыр
Һин бит саҡырҙың мине.

Һөйөклө мәктәбем менән
Хушлашырбыҙ бер заман,
Тик моңдарың, еҙ ҡыңғырау,
Ҡолаҡта сыңлар һаман.

(Абдулхаҡ Игебаев.)

## Рәхмәт һеҙгә!

Беҙ яҡшы уҡырға һәм яҙырға өйрәндек. Әле экскурсияға йөрөйбөҙ. Өлкәндәргә ярҙам итәбеҙ. Күмәкләп йырҙар йырлайбыҙ, бейейбеҙ. Китаптар, шиғырҙар уҡыйбыҙ, ятлайбыҙ, йомаҡтар ҡоябыҙ, әкиәттәр һөйләйбеҙ. Бына «Әлифба байрамы» етте. Беҙ уға бик яҡшы әҙерләндек. Байрамыбыҙға атай-әсәйҙәребеҙҙе саҡырырға уйлайбыҙ.

* * *

Инде хәҙер хәрефтәрҙең
Беләбеҙ бөтәһен дә.
Алда беҙҙе мөғжизәле
Киләсәк көтәһен дә.
Әлифбам — серле асҡысым
Аҡ юлдар теләп ҡала.
Ныҡышмал, сәмлеләр, ти ул,
Уңышҡа ирешә ала.

(Гөлназ Ҡотоева.)

# Йөкмәткеһе

Мәктәп юлында. *С. Муллабаев* . . . . . 3
Әкиәттәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . 4–7
Уҡыусының көн режимы . . . . . . . . . 8–9
Йәнтөйәгем — гүзәл Башҡортостан 10–11
Йыл миҙгелдәре *(Көҙ. Ҡыш)* . . . . . . 12–13
Йыл миҙгелдәре *(Яҙ. Йәй)* . . . . . . . 14–15
Беҙҙең ғаилә *(Йорт йыһаздары. Йорт эштәре)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 16–17
Кейем-һалым . . . . . . . . . . . . . . . 18–19
Йорт хайуандары. Ҡош-ҡорт . . . . . . 20–21
Урман йәнлектәре. Ҡоштар . . . . . . . 22–23
Хәрефтәрҙе өйрәнеү . . . . . . . . . . . 24–99
Яңы йыл килә. *Х. Ғиләжев* . . . . . . . . . . 100
Яңы йыл байрамы. *Р. Янбулатова* . . . . 101
Алфавит . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
Теләк. *Р. Ниғмәти* . . . . . . . . . . . . . 103
11 октябрь — Башҡортостан Республикаһы көнө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 104
Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 105
**Мин** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 108
Был мин. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . . . 109
**Минең ғаиләм** . . . . . . . . . . . . . . . . 110

Мин һәм атайым . . . . . . . . . . . . . . . —
Мин һәм әсәйем . . . . . . . . . . . . . . . 111
Әсәйҙәр бер генә. *Ә. Әсәҙуллина* . . . . 112
Әсәйем. *Ф. Ғөбәйҙуллина* . . . . . . . . . 113
Мин һәм олатайым . . . . . . . . . . . . . . 114
Мин һәм өләсәйем . . . . . . . . . . . . . . 115
Өләсәй. *К. Булат* . . . . . . . . . . . . . . 116
Мин һәм ағайым . . . . . . . . . . . . . . . 117
Мин һәм ҡустым . . . . . . . . . . . . . . . 118
**Минең туғандарым** . . . . . . . . . . . . 119
Ҡустым. *Г. Ғәлимова* . . . . . . . . . . . . 120
Өләсәй нимә тине? *Ф. Латипова* . . . . . —
**Мин һәм дуҫтарым** . . . . . . . . . . . . 123
Дуҫым, серҙәшем . . . . . . . . . . . . . . . 124
Ҡуян. *М. Бикбова* . . . . . . . . . . . . . . 125
Бесәй менән сысҡан. *Б. Байым* . . . . . . . —
Тейен. *Ғ. Бирҙин* . . . . . . . . . . . . . . 126
Болан. *Р. Абуталипова* . . . . . . . . . . . —
Һарыбай. *(Әкиәт.)* . . . . . . . . . . . . . 127
Сыйырсыҡ. *Р. Ғарипов* . . . . . . . . . . . 128
Асыуланма, Сыбарҡай. *Р. Абуталипова* —
Күгәрсен. Торна. Өйрәк. *Р. Ниғмәтуллин* 129
Дуҫтар. *Ф. Иҫәнғолов* . . . . . . . . . . . . 130
Кем минең әсәйем? *Ф. Ғөбәйҙуллина* 133
Алпамыша батыр. *(Әкиәт.)* . . . . . . . . . 136
Ике ҡуян балаһы. *И. Тимерханов* . . . . . 139
Еҙ ҡыңғырау. *А. Игебаев* . . . . . . . . . . 140
Рәхмәт һеҙгә! . . . . . . . . . . . . . . . . . 141

Учебное издание

**ГАЛЛЯМОВ** Абдрахман Абдрахимович
**ХИСАМИТДИНОВА** Фирдаус Гильмитдиновна
**АТНАГУЛОВА** Светлана Валеевна

# БУКВАРЬ

Учебник для башкирской школы

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. М. Рәхимова*
Мөхәррире *З. И. Яйкарова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректоры *Г. Ә. Таһирова*

Диапозитивтарҙан баҫырға кул ҡуйылды 16.07.09. Форматы $70 \times 90^1/_{16}$. «Букварная» гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Офсет ҡағыҙы. Шартлы баҫма таб. 10,53 + 0,58 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 43,88. Иҫәп-нәшер таб. 12,50 + 0,5 йәбештермә. Тиражы 1450 дана. Заказ № 1.0075.09.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының
«Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.


Ғ Д Ҙ Е
Й К Ҡ Л
Ө П Р С
Ф Х Һ Ц
Ь Э Ә Ю Я



Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте